# Йәш хәбәрсе

"Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,

Атам теле, әсәм теле – минең телем".

З.Биишева.



Ғинуар № 1, 2020 йыл
Талбазы ауылы Лицейы
муниципаль бюджет дөйөм белем
учреждениеһы

## 27 ҒИНУАР – ЛЕНИНГРАД ҠАЛАҺЫН БЛОКАДАНАН АЗАТ ИТКӘН КӨН

Ленинград ҡалаһын блокаданан азат итеүгә быйыл 75 йыл тулды. Рәсәй тарихында оҙаҡҡа һуҙылған һәм иң фажиғәле ваҡиғаларҙан һанала. Бөйөк Ватан һуғышы тарихында тәрән эҙ ҡалдырған был ҡамалыш ваҡытында Ленинградта йәшәүселәргә лә, ҡаланы һаҡлаусы һуғышсыларға ла ауыр һынауҙар аша уҙырға тура килгән.

27 ғинуарҙа Ленинград блокадаһы тамамлана. Был дата Рәсәйҙә Хәрби дан көнө булараҡ билдәләнә. 1941 йылдың 8 сентябренән алып 900 көн дауамында Ленинград халҡы һәм уны һаҡлаусылар оло ҡаһарманлыҡ һәм сыҙамлыҡҡа һынау тота.

Ҡала тик Ладога күле аша ҙур ер менән тоташа. 1941 йылдың 12 сентябренән башлап аҙыҡ-түлек һыу юлы аша, күл боҙ менән ҡапланғас, аттарҙа ташыла. Немецтар уны туҡтамай авиация утына тота. Ошоға ҡарамай, ул халыҡты, яралы һалдаттарҙы эвакуациялау, блокадала ҡалғандарға ҡорал, аҙыҡ- түлек ташыуҙа мөһим роль уйнай.

1944 йылдың 14 ғинуарында совет ғәскәрҙәре Ленинградта һөжүм операцияһын башлай. Бер нисә көн барған тигеҙ булмаған алышта, йәғни 27 ғинуарҙа, оҙаҡҡа һуҙылған, меңәрләгән ғүмерҙе өҙгән блокада өҙөлә һәм Гитлер ғәскәре сигенә.

Иҫтәлекле дата уңайынан лицейҙа Ленинград блокадаһы ҡорбандарын иҫкә алыу тантанаһы үтте.Район китапханаһы әҙерләгән “Һеҙ һәр ваҡыт иҫтә” тигән сарала 5– 6 класс уҡыусылары ҡатнашты. 8-9 класс укыусыларына “Ленинград блокадаһы” тураһында фильм тәҡдим ителде. Класс сәғәттәрендә дәһшәтле йылдар тураһында шиғырҙар һөйләнелде, йырҙар башҡарылды.







**Фән үрҙәренә**

## Ғилем, белем - иң ҙур байлыҡ ул




Фәнни-тикшеренеү эшен ойоштороуҙың төп маҡсаты - укыусыларҙың ижади эшләү һәләтен, ихтыяр көсөн үҫтереү, һәр нәмәгә ҡыҙыҡһыныу, эҙләнеү теләге булдырыу, мәктәптә укығанда уҡ алдына ҙур маҡсаттар ҡуйып, тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ менән шуға ынтылған, үҙ фекере булған, киләсәктә ниндәй ниндәй ҙә булһа бер фән өлкәһендә ижади эшләй алған, хатта ил менән идара итерлек талантарҙы эҙләү, үҫтереү.

Фәнни-тикшеренеү эше - ижади эш. Кеше үҙен ҡыҙыҡһындырған мәсьәләгә тотонғанда ғына, үҙе теләп башҡарған эште эшләгәндә генә ҡыуаныс һәм ҡәнәғәтлек таба. Фәнни эштәрҙән күренеүенсә, үҙ аллы фекер йөртә белгән, көслө ихтыярлы, эҙләнеүсән укыусылар лицейҙа етәрлек.

Конференция алдынан ҙур әҙерлек эштәре алып барылды: укытыусыларға методик укыуҙар ойошторолдо, укыусылар менән концультациялар үткәрелде.








**Арҙаҡлы шәхестәр**

## Легендар батыр



Миңлеғәле Минһажетдин (Минһаж) улы Шайморатов 1899 йылдың 15 (яңыса 27) авгусында элекке Өфө губернаһының Өфө өйәҙе Биштәкә ауылында батрак ғаиләһендә бишенсе бала булып донъяға килгән. (Был ауыл хәҙер Шайморатов ауылы тип атала). Милләте буйынса башҡорт.

1924—1931 йылдарҙа Мәскәүҙә ВЦИК ҡарамағындағы Юғары дөйөм хәрби училищела уҡый, 1934 йылда М. В. Фрунзе исемендәге Хәрби академияны алтын миҙал менән тамамлай.

1934—1935 йылдарҙа Төркиәлә, 1936—1940 йылдарҙа Ҡытайҙа хәрби атташе була.

Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, фронтта. 1941 йылдың авгусында ул үҙенең полкы менән фронтҡа.

1941 йылда республика хеҙмәтсәндәре иҫәбенә 112-се Башҡорт атлы дивизияһы ойоштоpола. Декабрь урталарында фронттан полковник М. М. Шайморатов ҡайтып төшә һәм ойоштоpолоп ятҡан дивизияны ҡабул итеп ала.

1943 йылдың 23 февралендә, дошман тылындағы оҙайлы рейдтан һуң фронт һыҙығы аша сыҡҡан ваҡыттағы тиңһеҙ һуғыштарҙа Башҡортостан баһадир улы гвардия генерал-майоры М. М. Шайморатов Ворошиловград өлкәһе Ивановка районының Штеревка утары янында батырҙарса һәләк була.

2018 йылдың майында Еңеү көнө алдынан Башҡортостан музейҙарында легендар дивизия командиры Миңлеғәли Шайморатов тураһында документаль фильм күрһәтелде

2015 йылды Ҡырмыҫҡалы районы Шаймورат ауылында 112-се Башҡорт атлы дивизияһы һәм уның командиры генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовҡа арналған Хәрби Дан мемориалы асылды.

2012 йылдың 21 ноябрендә Рәсәй Президентының 1561-се Указы менән Рәсәй Федерацияһы Эске эштәр министрлығы Эске ғәскәрҙәренең 27-се Махсус тәғәйенләнеш отрядына М. М. Шайморатов исеме бирелде.

Республикала легендар батырға арнап төрлө конкурстар үткәрелеп тора.

Генерал- майор М.Ғ.Шайморатовтың иң яҡшы портретына конкурс иғлан ителгәйне. Конкурсҡа 327 эш ебәрелгәйне. Беҙҙең уҡыусыларҙың эштәре лә яҡшы баһа алды. 8 –се класс уҡыусыһы Кәримова Аделина һәм 6-сы класс уҡыусыһы Бикмурзина Согдиана етәкселәре Усманова Рима Ғәлимйән ҡыҙы менән байрам тантанаһына барып диплом һәм бүләктәр алып ҡайттылар.





**Сәләмәт тәндә—сәләмәт рух**

## Спорт һөйөүселәр ярышы

Ҡышҡы каникулдың бер көнөндә лицейыбызға етеҙлектәрен, тапҡырлыҡтарын һынарға спорт һөйөүсе ғаиләләр йыйылды. Беҙ үҙҙәрен көслө алҡыштар менән ҡаршы алдыҡ.
Бына улар – Абдуллиндар, Ғәзелшиндар, Ибәтуллиндар, Харисовтар, Ханмурзиндар, Баязитовтар, Ғиләжетдиновтар, Йәлиловтар, Сафиндар, Фәтҡуллиндар, Алексеевтар ғаилә командалары. Ярыштарҙы башланғыс синыфтар укытыусыһы Гүзәл Ғиләжетдинова, физкультура дәресе укытыусыһы Елена Иванова һәм баш судья Владислав Иванов баһалаясаҡ.

Командалар сығыш яһаған ваҡытта тамашасылар көслө алҡыштар менән уларға дәрт өҫтәп торҙо. Музыка уйнап, спорт залы шау-гөр килде. Зал «Бергә булайыҡ», «Сәләмәт булайым, тиһәң» тигән яҙыуҙар менән дә биҙәлгәйне.
Ярышта ҡатнашыусылар бик ҡыйыу, етеҙ, өлгөр булып сыҡты. Жюри ағзаларына иң-индәрҙе һайлау бик ауырға тура килде. Уйын булғас, ни эшләйһең, еңеүсе лә була бит инде. Иң шәптәре, ҡыйыуҙары, тапҡырҙары тип Йәлиловтар ғаиләһе танылды. Улар иртәгә Өфөлә үтәсәк «Яңы йыл ғаилә уйындары» республика фестивалендә ҡатнашасаҡ. Был ярыштан да еңеп ҡайтыуҙарын теләйбеҙ.







Мөхәрририәт: башҡорт теле укытыусыһы Булатова Г.М., 11 класс укыусылары